**18 –се практик эш**

**Темаһы:** Башҡортостанда малсылыҡ. Скотоводство в Башкортостане.

**Башҡарыласаҡ эш төрҙәре:** ҡушма, парлы һүҙҙәрҙе ҡулланыу буйынса практик биремдәр башҡарыу.

**Наименование работы:** выполнение практических заданий на применение сложных (парных) слов.

**Маҡсат:** Башҡортостанда малсылыҡтың башҡорт аш – һыуы менән бәйләнешен асыҡлау, ҡушма һүҙҙәрҙе ҡулланыу буйынса күнекмәләр булдырыу.

**Ваҡыт нормаһы:** 2 сәғәт.

**Әҙәбиәт:** 1.Усманова М.Ғ., Солтанғолова З.З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған һөнәри белем биргән ойошмалар өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2015.

**Техник хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре:**

1.Эште инструкцион – технологик карта буйынса башҡарырға.

2.Эш урынын тәртиптә тоторға. 3.Кеҫә телефондарын һүндерергә.

**Инеш инструктаж (письменно)**

1.Һүҙлек эше: 202 – се бит. 2.Составы буйынса һүҙҙәр ошондай төркөмдәргә бүленәләр: **тамыр һүҙҙәр** (корневые, т.е. слова, состоящие из корня), **яһалма һүҙҙәр** (производные, образованные с помощью словообразующих аффиксов), **ҡушма һүҙҙәр** (сложные слова, состоящие из двух или более слов ). Мәҫәлән: күҙ, һүҙ, баш - тамыр һүҙҙәр, баш**лыҡ**, күҙ**лек**, һүҙ**сән** - яһалма һүҙҙәр, башҡорт, Башҡортостан Республикаһы, йылъяҙма – ҡушма һүҙҙәр.

**Эш башҡарыуҙың йөкмәткеһе һәм эҙмә – эҙлелеге:**

**1-се бирем. Текст өҫтөндә эш 203 - сө (203-сө) бит, 1 –се күнегеү:**

**1.Тексты рус теленә тәржемә итегеҙ (Переведите текст на русский язык).**

Башҡорт аштары

Башҡорттар борон – борондан малсылыҡ менән шөғөлләнгән. Шуға күрә башҡорт аш – һыуында ит һәм һөт аҙыҡтары төп урынды тота.

Бишбармаҡ, һалма, итле аш традицион һый булып тора. Был ризыҡтарҙы ат йәки һарыҡ итенән әҙерләгәндәр. Ҡунаҡтарға ит, ҡаҙы ултыртҡандар. Иттән һуң ҡоротлап һурпа эсергәндәр.

Ҡышҡылыҡҡа итте туңдырғандар, ә яҙғылыҡҡа һәм йәйгелеккә тоҙлағандар йәки ҡаҡлағандар. Башҡорттарҙың аш – һыуында ҡош – ҡорт ризыҡтары ла булған. Йорт ҡош – ҡорто булмаған осраҡта, улар сел, ҡор, ҡыр өйрәге, ҡыр ҡаҙы атып алған.

Торна, аҡҡош, бөркөт, ыласын, ҡарсыға, ала ҡарға, өкө итен ашау тыйылған.

Башҡорттарҙың һөт ризыҡтарынан ҡатыҡ, эремсек, ҡаймаҡ, май, ҡорот киң таралған.

Ҡымыҙ, айран, буҙа, сәй – башҡорттарҙың иң яратҡан эсемлектәре.

**2.Текстан һорауҙарға яуаптар табығыҙ (Ответьте на вопросы по тексту):**
Башҡорттар борон- борондан нимә менән шөғөлләнгән? Башҡорттарҙың аш-һыуында ниндәй аҙыҡтар өҫтөнлөк алған? Традицион һый булып ниндәй аштар тора? Ниндәй ҡоштарҙың итен ашау тыйылған? Башҡорттарҙың

яратҡан эсемлектәрен һанап китегеҙ. **3.Текстан ҡушма һәм яһалма һүҙҙәрҙе табып күсереп алығыҙ (Выпишите из текста сложные (парные) слова).**

**2-се бирем.** Бирелгән һүҙҙәрҙе төркөмдәргә бүлеп яҙығыҙ (слова распределите по группам **по образцу**): 203 - сө (204 – се) бит, 2 –се күнегеү.

| Ит аштары (мясные блюда) | Һөт аштары (молочн. блюда) | Ҡамыр аштары (блюда из теста) | Эсемлектәр (напитки) |
|---|---|---|---|
| ҡаҙы | ҡаймаҡ | бәлеш | сәй |

**Слова:** һалма, ҡымыҙ, буҙа, эремсек, айран, сәк – сәк, май, гөбәҙиә, тултырма, ҡорот, һарыҡ ите, бишбармаҡ, ҡоймаҡ, билмән, өсбосмаҡ, бауырһаҡ, ҡатыҡ, итле аш, икмәк.

**3-сө бирем. Вариантлап эшләү.** Бирелгән тамыр һүҙҙәрҙән ҡушма, яһалма һүҙҙәр барлыҡҡа килтерегеҙ (От данных слов образуйте производные, сложные слова **по образцу**): **тәм -** вкус – тәм**ле** – вкусный – тәм**һеҙ** – невкусный – тәм – том – сладость.

**1-се вариант:** ҡул, эш, төн, таш, ауыл, аҡыл.

**2-се вариант:** һөт, көн, бал, баш, урман, ҡыш.

**4-се бирем.** Бирелгән һүҙҙәр араһынан тамырҙаш булғандарын табып, төркөмләп яҙығыҙ. (Среди данных слов найдите однокоренные слова и распределите по группам **по образцу**): **ҡул** – рука – ҡулһыҙ – безрукий – ҡулъяулыҡ – платочек.

кешелекле, умарта, яуаплылыҡ, малсылыҡ, башлыҡ, урман, ҡул, кеше, йылҡы, умарталыҡ, урманлыҡ, кешелек, яуапсыл, йылҡысылыҡ, малсылыҡ, умартасылыҡ, урмансы, баш, ҡулъяулыҡ, ҡулһыҙ, мал, яуап, тәмле, тәмһеҙ, аш-һыу, ашлыҡ, тәм.

**Биремдәрҙе башҡарғандан һуң**
**студент белергә һәм эшләй белергә тейеш:**

1.Башҡорттарҙың иң төп кәсебе тураһында – малсылыҡ тураһында, һүҙҙәрҙе морфемик өлөштәргә бүлергә, һүҙ составын билдәләргә,

2.Һөйләмдәр төҙөү, ҡушма һүҙҙәрҙе ҡулланыу буйынса күнекмәләр булдырырға.

**Контроль һорауҙар һәм биремдәр:**

1.Башҡорттарҙың милли аш –һыуы нимәгә бәйләнгән? Улар малсылыҡҡа бәйле нимәләр етештергән?

2.Ниндәй һүҙҙәр тамыр һүҙҙәр, яһалма һүҙҙәр, ҡушма һүҙҙәр тип атала? Миҫалдар килтерегеҙ.

**Студенттарҙың үҙаллы эше өсөн биремдәр:**

Дәреслектән 202 –204 - се биттәр, Л.2.81 – 83 – сө биттәр. Башҡорт милли аш –һыуын белдергән һүҙҙәрҙе ятларға, ижади эш төҙөргә (Выучить слова, обозначающие башкирские национальные блюда, выполнить творческую работу на тему «Башкирские национальные блюда»).

Уҡытыусы______________ Мөхөтдинова Ф.Р.